## Ғилем һәм ғәмәл

*(Башы 11 һанда. Дауамы бар).*

***3-сө дәрес***

# “ЛӘ ИЛӘҺӘ ИЛЛӘЛЛАҺ” МӘҒӘНӘҺЕ

Алдағы дәрестәрҙә беҙ Аллаһы Тәғәлә тураһында һөйләштек. Уның сифаттары булғанын белдек. Аллаһы Тәғәлә - ошо донъяның илаһы, һәм беҙ Уға ғибәҙәт тейешбеҙ. Башҡа илаһтарға табынырға ярамай, сөнки улар - ялған илаһтар. Башҡа илаһтарҙан баш тартыу “Лә иләһә илләллаһ” тигән һүҙҙән башлана. Был һүҙҙәр - шәһәдәт һүҙҙәре. бәлки, был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен күбебеҙ беләләр. “Лә иләһә илләллаһ” - ул “Аллаһтан башҡа илаһ юҡ” тигән һүҙ. Бер нисә хәҙистә әйтелгәнсә, ошо һүҙҙе әйткән кеше Йәннәткә керәсәк. Ниңә һуң был һүҙҙәргә шундай ҙур әһәмиәт бирелгән? Әллә уларҙың хәрефтәрендә ниндәйҙер бер тылсымлы көс бармы? Һәм был һүҙҙәрҙе әйтеп тел ҡыбырланымы, Йәннәт ишектәре асылып та китәме?

Юҡ. Шәһәдәт һүҙҙәре әйтеп тел ҡыбырлатыу етмәй. Был һүҙҙәрҙе Фирғәүен (русса - Фараон) дә әйтте, ләкин ул Йәһәннәм утынан ҡотолманы. Ҡөрьәндә быны турала шулай тиелгән: “Һәм беҙ Исраил балаларын диңгеҙ аша үткәрҙек, Фирғәүен һәм уның ғәскәре асыу һәм дошманлыҡ менән улар артынан ҡыуып китте. Әммә, бата башлағас, ул: “Иман килтерәм, Исраил балалары иман килтергән илаһтан башҡа илаһ юҡ, һәм мин - мосолмандарҙан!” - тине. Хәҙер генәме! Ә элек һин буйһонманың һәм боҙоҡлоҡ таратыусыларҙан булдың...” (“Юныс” сүрәһе, 10:90-91).

Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, Фирғәүен Муса пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм артынан эйәрмәне. Ә бит ул Муса ғаләйһиссәләмдең Аллаһ илсеһе икәнен белде. Муса пәйғәмбәр Фирғәүенде “Лә иләһә илләллаһ” һүҙҙәрендә саҡырған ине. Йәғни: “Бүтән илаһтарға ғибәҙәт итеүҙән баш тарт. Шәһәдәт әйтеп, мосолман бул!” - тине. Ә был Фирғәүен үҙен илаһ тип һанай ине, “Мин үҙ халҡым өсөн бүтән хужа белмәйем, танымайым”, - тине. Йәғни, был Фирғәүен ширк ҡылды. Ул үҙ-үҙен Аллаһы Тәғәләгә тиндәш күрҙе. Алдағы дәрестәрҙә беҙ, ширк - ул нимәнелер йә кемделер Аллаһҡа тиңдәш ҡуйыу, тип әйткән инек. Ә Фирғәүен үҙен илаһ тип һананы һәм шул рәүешле иң ҙур гонаһ - ширк ҡылды. Был тарихи ваҡиға Ҡөрьәндең бер нисә сүрәһендә телгә алынған. Фирғәүен иман килтермәгәс, Муса пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм үҙенең халҡы менән Мысырҙан (Египеттан) сығып китте. Фирғәүен иһә, йәһүдтәрҙе Мысырҙан сығармаҫ өсөн, уларҙың артынан ҡыуа төштө. Аллаһы Тәғәлә Исраил балалары (йәһүдтәр) алдында диңгеҙҙе икегә айырҙы, шул арҡала улар Фирғәүен ғәскәрҙәренән икенсе ярға ҡасып сыға алдылар. Фирғәүен дә, уларҙы ҡыуып етәм тип, ошо икегә айырылған диңгеҙ төбө буйлап елде. Ләкин Аллаһ ихтыяры менән диңгеҙ кире ҡушылды, һәм Фирғәүен үҙ ғәскәрҙәре менән бата башланы. Шул ваҡыт ул: “Лә иләһә илләллаһ! Мин мосолман!” - тип ҡысҡырҙы, тик был һүҙҙәр уны ҡотҡарманы. уйлана белгәндәр был тарихтан үҙҙәренә ғибрәт алһын ине. Әлбиттә, “Лә иләһә илләллаһ” тип әйткән кеше Йәннәткә керәсәк. Ләкин был һүҙҙәрҙе ул ысын йөрәктән әйтеү фарыз. Был һүҙҙе, иман шәһәдәтен, әйтеүсе кеше баштан аяҡҡа тиклем үҙгәрергә тейеш. Ә быының өсөн шәһәдәттең мәғәнәһен дөрөҫ аңларға, уны йөрәгең менән ҡабул итергә һәм тормошондо шул ҡабул ителгән төшөнсәгә ярашлы итеп ҡорорға кәрәк. Шуға күрә иң тәүҙә был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатып үтәйек.

“Лә”: юҡ;

“иләһә”: илаһ (табыныу культы);

“иллә”: башҡа, бүтән;

“Аллаһ”: Аллаһ.

Йәғни, “Лә иләһә илләллаһ” - “Аллаһтан башҡа илаһ юҡ” тигән һүҙ. Тулыраҡ итеп әйтһәк, “Аллаһтан башҡа табыныуға лайыҡ булған һис бер илаһ та юҡ” килеп сыға. “Илаһ” - ғәрәп һүҙе, ул илаһлаштырыла алған бөтә нәмәне лә үҙ эсенә ала. Шулай булғас, насраниҙарҙың илаһы - Ғайса пәйғәмбәр, ҡытайҙарҙың бер өлөшөнөң илаһы - Будда, коммунистарҙың илаһы - Ленин (йә К.Маркс), донъя малы өсөн ҡайғырып йәшәгән кешеләрҙең илаһы - аҡса... Дауам итәйекме? Кәрәкмәйҙер. Ә һеҙҙең илаһығыҙ кем? Артабан уҡыр алдынан, бер уйлағыҙ әле: һеҙҙең өсөн нимә (йә кем) бар нәмәнән дә иң-иң өҫтөн булып тора? Нимә (йә кем) һеҙҙең өсөн иң ҡәҙерлеһе, иң яратҡаны, иң өҫтөнө - шул һеҙҙең илаһығыҙ. Һеҙ уға табынаһығыҙ һәм һеҙ - уның ҡоло. Кемдер, бәлки: “Кешеләр нимәнелер өҫтөн ҡуялыр ҙа, әммә ләкин улар уға табынмай бит!” - тиер. Ә һеҙ “табыныу” һүҙенең мәғәнәһен беләһегеҙме? Табыныу - ул һеҙ үҙегеҙ өсөн иң өстөн тип ҡуйған нәмәгә ярарға тырышып йәшәү, ул ҡуйған шарт-талаптарҙан ситкә тайпылыуҙан ҡурҡыу.

Әйтәйек, фашистка Гитлер: “Үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн ҡуй, немец булмағандарҙы кешегә һанама, Бөйөк Рейх өсөн ғүмеренде бирергә әҙер бул!” - тип өйрәтһә, һәм фашист был принциптарға ышанып, улар буйынса йәшәһә, ул ошо идеологияның ҡолона, бөйөк Германия идеяһы - уның илаһына, ә Гитлер уның пәйғәмбәренә әйләнә, әстәғәфируллаһ.

Ә бөгөн кемдәр: “Мин аҡҫа өсөн йәшәйем, ятһам да, торһам да уны уйлайым, аҡсаға таянған принциптарҙы үҙ итәм, ә матди файҙаһы булмаған принциптарҙы ҡабул итмәйем”, - ти, ул - аҡса ҡоло. Ундай кешегә нимә ярай, нимә ярамағанын аҡса билдәләй.

Кемдер иһә: “Мин бер нәмәнең дә ҡоло түгел, минең илаһым юҡ, мин үҙем нимәне кәрәк тип табам, шуны эшләйем!” - тиһә, ул - үҙ нәфсеһенең (үҙ “эго”һының) ҡоло.

“Кешеләр араһында Аллаһҡа тиңдәш тотоусылар бар һәм, Аллаһты яратҡан кеүек, уларҙы яраталар. Әммә иман килтергән кешеләр Аллаһты нығыраҡ ярата...” - ти Аллаһы Тәғәлә *(Ҡөрьән, “Һыйыр”сүрәһе, 2:165.* Ә хәҙер инде тағы ла уйлағыҙ: кем ул һеҙҙең илаһығыҙ, Аллаһы Тәғәләме? Яҡшы. Ләкин һеҙ Уға нимә оҡшай, нимә оҡшамай икәнен һорағанығыҙ булдымы? Үҙ ғүмерегеҙгә бер тапҡыр булһа ла. Уның “ярай-ярамай” йә иһә “хәләл-харам”дарын белергә тырыштығыҙмы? Әллә һеҙҙең бөгөнгө тиклем ниндәйҙер башҡа илаһығыҙ булды ла, ул һеҙгә хәләл-харамдарҙы билдәләнеме? Әгәр шулай икән, иҫке илаһығыҙҙан тиҙерәк ваз кисегеҙ һәм яңынан “Лә илләллаһ” тип иман килтерегеҙ. Бына хәҙер инде һеҙ - мосолман. Әгәр был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дөрөҫ аңлап, ысын күңелдән әйттегеҙ икән, һеҙ - мосолман. Һәм хәҙер һеҙҙең илаһығыҙ - Аллаһы Тәғәлә. Хәҙер һеҙ Аллаһы Тәғәлә ҡанундары буйынса йәшәй башларға тейешһегеҙ, ә уның ҡанундары сығанағы - Ҡөрьән һәм Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһү ғаләйһи үә сәлләм) сөннәте.

“Лә иләһә илләллаһ”ты, Аллаһы Тәғәләне берҙән-бер илаһ итеп таныу һәм тик Уға ғына ғибәҙәт итеү хәҡиҡәтен (ә был инде донъяла иң бөйөк хәҡиҡәт!) аңлатыу - бөтә пәйғәмбәрҙәрҙең дә миссияһы булған (уларҙың дөйөм һаны - 124 мең). Тимәк, ҡасандыр башҡорттарҙың да, монголдарҙың да, рустарҙың да пәйғәмбәрҙәре булған һәм улар үҙ халҡын берҙән-бер, Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылырға саҡырғандар. Сөнки тик Ул ғына беҙҙе барлыҡҡа килтергән, беҙҙе йәшәтә, әллә нисә төр йән эйәләрен яратып, беҙгә хеҙмәт иттерә, ошо Ер шарын һәм ундағы йәшәү шарттарын беҙгә яраҡлы ҡылған һәм, Үҙе вәғәҙә итеүенсә, бер көн быларҙың барыһын да юҡҡа сығарасаҡ... Бына шул көн, Ҡиәмәт көнө, беҙ барыбыҙ ҙа Уның ҡаршыһында ҡылған эштәребеҙ өсөн яуап тотасаҡбыҙ. Был донъяла берәй ҡатын-ҡыҙ, етәксе, балағыҙ, аҡса, власть, мал-мөлкәт, йә башҡа берәй нәмә һеҙҙең илаһығыҙ булған икән, ул көндө шуларҙан ҡотолоу эҙләрһегеҙ, ләкин ул көн Аллаһтан башҡа бер кем дә ярҙамсы була алмаҫ:

“Ул көндө мал да, балалар ҙа ярҙам итмәҫ...” *(Ҡөрьән, “Шағирҙар” сүрәһе, 26:88).*

“Гонаһлы кеше ул көндө үҙ улдарын, һәм үҙенең ҡатынын, һәм ир туғанын, һәм уға һыйыныр урын бирә торған туғантыумасаһын, һәм Ер йөҙөндә булған барлыҡ кешеләрҙе фидйә итеп биреп ҡотолорға теләр, тик улар уны ҡотҡарһындар ғына” (Ҡөрьән, “Баҫҡыстар” сүрәһе, 70: 11-14). Йәғни Ҡиәмәт көнөндә кеше үҙен ҡотҡарыр өсөн бөтөн дөньяны бирергә әҙер буласаҡ. Ләкин инде һуң. Ул көндө кешегә тик изге эштәре генә файҙа килтерә алыр.

“Кафыр хәлдә була тороп, балаларҙың да сәстәре ағара торған көндән нисек ҡотолорһоғоҙ һеҙ?” *(Ҡөрьән, “Кейеменә төрөнгән” сүрәһе, 73:17).*

“Ҡиәмәт ҡубыуын яҡындан күргән ваҡытта кафырҙарҙың йөҙө йәмһеҙләнер, һәм уларға: “Бына ошо инде һеҙ саҡырған нәмә!” - тип әйтелер” *(Ҡөрьән, “Хакимиәт” сүрәһе, 67:27).*

“Йөҙҙәр ағарған һәм йөҙҙәр ҡарайған көндә. Йөҙҙәре ҡарайғандарға әйтелер: “Иман килтергәндән һуң һеҙ кафыр булдығыҙмы ни? Кафыр булғанығыҙ өсөн ғазапты татығыҙ инде!” (Ҡөрьән, “Ғимран ғаиләһе” сүрәһе, 3:106).

“Ул көндө барығыҙ ҙа килеп баҫырһығыҙ, серҙәрегеҙ йәшерелмәҫ” (Ҡөрьән, “Ҡотолғоһоҙ” сүрәһе, 69:18).

“Ул көндө кеше: “Ҡайҙа ҡасырға?” - тип һорар. Юҡ һәм юҡ! Ҡасыу урыны юҡ! Ул көндө һыйыныу һинең Раббыңа ғына!” *(Ҡөрьән, “Ҡиәмәт көнө” сүрәһе, 75:10-12).*

Аллаһтан башҡа бер кем дә һеҙҙе ҡотҡармаҫ һәм ул ҡурҡыныс көндә тик “Лә иләһә илләллаһ” буйынса йәшәгән кешеләр генә Йәннәткә керер, Сөнки башҡа илаһтарҙың йәннәте юҡ, улар һеҙҙе тик Йәһәннәмгә генә илтәләр. Аллаһы Тәғәлә ул ялған илаһтарҙың ҡолдары тураһында шулай ти: “Уларға: “Аллаһтан башҡа илаһ юҡ!” - тиелгәндә, улар тәкәбберләнде” (Ҡөрьән, “Сафтарҙа тороусылар” сүрәһе, 37:35). Шундай кешеләр араһынан, тәкәбберҙәрҙән, булырға яҙмаһын һеҙгә! Һеҙгә лә, ата-әсәләрегеҙгә лә, балаларығыҙға ла! Амин.

Хөрмәтле ҡәрҙәштәр! Һеҙгә тағы шуны әйтергә теләйем. Бөтәгеҙ ҙә Ҡөрьән китабы тураһында беләһегеҙ. Ләкин ниңә һеҙ шул Ҡөрьәнде бер тапҡыр булһа ла уҡып сығырға тырышмайһығыҙ? Үҙегеҙ кеше үлгәндән һуң өсөнсө, етенсе, ҡырҡынсы көнгә Ҡөрьән уҡытыр өсөн кеше саҡыраһығыҙ. Ул кеше һеҙгә Ҡөрьән уҡый. Ләкин һеҙҙең: “Ә Ҡөрьәндә нимәләр тураһында һөйләнелә ул?” - тип һорау биргәнегеҙ булдымы? Ғөмүмән, Ҡөрьәндең ябай китап түгел, ә Аллаһы Тәғәләнең Мөхәммәт пәйғәмбәргә (саллаллаһү ғаләйһи үә сәлләм) ете күк артынан индергән китабы икәнен беләһегеҙме? Һәм Аллаһы Тәғәләнең һеҙҙән нимә теләгәне тураһында уйланғанығыҙ бармы? Ниңә һеҙ Ҡөрьән китабы тураһында тик кеше үлгәндә, йә кеше тыуғанда, йә яңы йортҡа күсенгәндә генә хәтерләйһегеҙ? Был китапты Аллаһы Тәғәлә тик мәжлестәрҙә уҡыу өсөн генә индермәне. Ҡөрьән ул тик муллалар ғына уҡый торған китап түгел. Ҡөрьән - шәхси һәр бер кешегә йүнәлтелгән китап. Ҡөрьән - ул Аллаһы Тәғәлә һүҙе. Ҡөрьәнде Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм үҙе уйлап яҙмаған. Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм уҡый ҙа белмәй ине, яҙа ла белмәй ине. Һәм Ҡөрьән матурлыҡ өсөн генә өйҙә иң юғары урында ята торған китап түгел. Уны уҡып, мәғәнәһен аңларға тырышырға кәрәк. Иң аҙында, Ҡөрьәндең иң тәүҙә нимәгә саҡырғанын һеҙ белергә тейешһегеҙ. Ҡөрьән тулыһынса “Лә иләһә илләллаһ” һүҙҙәре тураһында. Йәғни, нисек башҡа илаһтарға табынмаҫҡа һәм тик Аллаһҡа ғына ғибәҙәт итергә. Ҡөрьән бына ошо турала.

“Лә иләһә илләллаһ” һүҙен дөрөҫ аңламаған һәм уны ҡабул итмәгән кеше мосолман түгел. Ундай кеше Йәннәткә керә алмаясаҡ. “Лә иләһә илләллаһ”ты инҡар иткән кешенең урыны - Йәһәннәм. Ә мәңгелек тамуҡты һеҙ күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы? Уйлап ҡарағыҙ әле, әгәр һеҙҙе, әйтәйек, мунсаға бер йылға бикләп ҡуйһалар, эсергә һыу ҙа, ашарға ла бирмәһәләр, һеҙ үҙегеҙҙе нисек тойор инегеҙ? Кемдер әйтә: “Мин, бәлки, өс көндән үлер инем”, - ти. Эйе, бәлки. Ләкин, белегеҙ, тамуҡта кеше үлмәй. Аллаһ беҙҙе тамуҡтан һаҡлаһын. Ә тамуҡтан ҡтолоу юлы - ул тик “Лә иләһә илләллаһ” һүҙен дөрөҫ аңлап, уны ҡабул итеп, шул һүҙҙәргә ярашлы тормошоғоҙҙо ҡороу. “Лә иләһә илләллаһ” һүҙҙәрен көн дә йышыраҡ ҡабатлағыҙ. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһү ғаләйһи үә сәлләм) был һүҙҙәрҙе йыш әйтә торған булған. Был һүҙҙәрҙе ҡабатлау кешенең иманын яңырта. Сөнки ниндәйҙер тышҡы шарттар тәьҫире арҡаһында кешенең иманы ныҡ кәмеп китеүе мөмкин. Ә “Лә иләһә илләллаһ” ты аңлы рәүештә ҡабатлау иманды арттыра.

